# “ АЛТЫН КӨҘ”

## Байрамы өлкәндәр төркөмендә



Әҙерләне 19-сы балалар

баҡсаһының тәрбиәсеһе

Хутова К.З

Балалар музыка көйөнә килеп инәләр.

1. Моңһоуланды урмандар

Һарғайҙы ҡырҙар өҫтө

Йылға күлдәр топ-тоноҡ

Көҙ килде бит –Көҙ килде.

2 .Баҡсабыҙға көтмәҫтән

Ниндәй алтын төҫ керҙе?

Япраҡтар яуҙы юлға-

Көҙ килде бит –Көҙ килде

2. Килһен әйҙә , килһен әйҙә

Яратам алтын көҙҙө.

Беҙҙең балалар баҡсаһы

Һағынып көттөк көҙҙө.

4. Күмәкләп беҙҙә дуҫтар,

Йырлап алайыҡ әле.

Ҡотло булһын, гөрләп торһон

Алтын көҙҙөң байрамы.

Йыр: “ Көҙ йыры”

5. Көҙгө юлдан атлайым әкрен генә,

Ер ҡойона һары япраҡтар менән.

Һары япраҡтар менән бергә,

Беҙҙә бейейек дуҫтар.

“ Башҡорт полькаһы” бейеүе

КӨҘ апай керә

А.Б: Алтын көҙ апай, Һеҙ беҙҙә ҡунаҡта

Беҙҙең балалар һеҙҙе ашҡынып көтөп алды.

6. Көҙ килгән,көҙ килгән

Көҙ быйыл бик тиҙ килгән.

Ҡайындар,тирәктәр

Һарынан күлдәк кейгән.

7. Көҙ килгән,тиҙ килгән,

Тиҙ килгәнен кем белгән

Көҙ бит һорап та тормайса

Баҡсаға барып ингән.

8. Көҙ апай Мин һеҙҙең өсөн көҙ тураһында шиғыр уҡыйым.

“Көҙгө урман”.

Еләк – емештәрһеҙ ҡалғанғамы,

Көҙ урман тора бик бойоҡ

Һәр бер кейек, Ҡыш килерен көтөп

Әҙерләнеп йөрөй көн буйы.

Тайыш табан айыу өң хәстәрләй,

Ҡорттар эҙләй ағас ярығын.

Ашыҡмайҙар ҡырмыҫҡалар ғына

Улар йәйҙә эшләп арыған.

9.Көҙ апай, ә мин һеҙҙгә С.Юлаевтың “Тыуған илем “тигән шиғырын уҡып ишеттерәм.

“ Тыуған илем”

1 б. Минең тыуған ҡырҙарым,

Балдай татлы һыуҙарым,

Яландарым, ҡырҙарым,

Күккә ашҡан Уралым,-

Минең изге төйәгем,

Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

2 б.Күгәреп күккә үрелгән,

Ҡарлы башын Уралдың

Күҙҙең яуын алырҙай,

Матурлығын ҡырҙарҙың,

Мәңге маҡтар инем мин,

Мәңге данлар инем мин.

КӨҘ апай: Һай,һай, бик матур шиғыр һөйләнегеҙ. Ә хәҙер мин һеҙгә балалар , Р Ниғмәтиҙең “ВАТАН” тигән шиғырын

һөйләп ишеттерәм. Минең улым беркөн миңә- Әсәй, Ватан нимә ул? – тигән һорау бирҙе, әмин уға былый тип яуап бирҙем:

“ Ватан”

Эй, улым , Ватан ошо ул-

Һин баçып торған урын,

Һәм һинең көн һайын иртән

Уйнарға сыҡҡан юлың,

Уй менән уйлап бөтмәçлек,

Бөйөк ул беҙҙең Ватан,

Хыялдар менән етмәçлек

Бейек ул беҙҙең Ватан.

Аҡ болоттарға менһәңдә,

Күренмәй уның сиге,

Бар доньяға нурын һибеп

Яҡтыра уның бите.

А.Б: Көҙ апайҙың матур шиғыр-күстәнәсенә күмәкләшеп рәхмәт әйтәйек. РӘХМӘТ.

КӨҘ апай: Япраҡтарым, япраҡтарм,

Һары –йәшел япраҡтарым.

Әйҙәгеҙ-әйлйнегеҙ- өйрөлөгөҙ,

Көҙ апайығыҙҙы шатландырығыҙ

“ ЯПРАҠТАР ВАЛЬСЫ”

А.Б:Көҙ апай, беҙҙең балалар уйнап-көлөп күңел аса беләләр

Түңәрәк (хоровод) уйыны:

“ Ҡарағыҙсы кемдәр бейей”

КӨҘ апай: Һай, афарин, бик матурбейенеләр, йырланылар.

Ә уйын уйнай белаһегеҙме. Минелә уйынға алығыҙсы, зинһар.

“ ҠАП ТА ҠАП “ , “СҮЛМӘГЕҢДЕ ҺАТАҺЫҢМЫ” –уйындары

10 б: Таң алдынан дәртле итеп

Моңло һандуғас һайрай.

Юҡ, һандуғас түгел икән,

Минең дуҫтарым йырлай.

Йыр: “ КАЙЫНДАР “

11б: Эй, ҡошҡайҙар, ҡошҡайҙар,

Ҡәҙерле һеҙ дуҫҡайҙар.

Ер-һыуҙың матурлығын маҡтап

Һайрайһығыҙ , ҡошҡайҙар.

Йыр:” ҺАУ БУЛЫҒЫҘ, АҠҠОШТАР”

А.Б: Ел һыҙғыра,ел һыҙғыра,

Көҙ етте бит,көҙ етте.

Ә йөрәктәр,ә йөрәктәр-йыр көтә, бейеү көтә.

Бейеү: “ҺАРЫ ЯПРАҠ”

КӨҘ апай:

Балаларым,алтындарым, бик ҡыуандырҙығыҙ мине. Ҙур рәхмәт һеҙгә. Ә хәҙеринде күрше балалар баҡсаһында һеҙҙең кеүек кескәй дуҫтарым мине көтә. Һеҙҙең менән дә ,ҡунаҡтар менән дә хушлашам. ҺАУ БУЛЫҒЫҘ.

А.Б: Эйе, Көҙ апай, беҙгә лә һеҙҙең менән һәм ҡунаҡтар менәнхушлашырға ваҡыт етте. Уларға һаулыҡ, шатлыҡ, уңыштар теләп ҡалабыҙ.